■ Уҡыусыларыбыҙ хаты

# ҒИЛЕМ АЛЫРҒА ЫНТЫЛЫҒЫҘ

**Ә.НОҒОМАНОВА,**
**Сибай ҡалаһы**

Бисмилләһир-рахмәнир-рахиим. Белем, белем алыу һәм шуға оҡшаш һүҙҙәр Ҡөрьән Кәримдә бик күп ҡабатлана. Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙән Үҙен таныуҙы, Ҡөрьән һәм Сөннәтте өйрәнеүҙе, был донъяла ла, әхирәттә лә бәхеткә илтеүсе белем алыуҙы һәм уны дөрөҫ ҡулланыуҙы талап итеп Ҡөрьәни Кәримдә былай ти: “...Аллаһ һеҙҙең арағыҙҙан иман килтергән һәм белем эйәһе булған мөьминдәрҙе дәрәжәләргә күтәрә...” (Әл-Муджәдәлә, 11-се аят), “Был мәҫәлдәрҙе Беҙ кешеләргә килтерәбеҙ, әммә уларҙы белемле кешеләр генә аңлар” (Әл-Ғәнкәбүт, 43), “...Белеүсе менән белмәүсе бертигеҙ булырҙармы ни,..” (Әз-Зүмәр, 9).

Хәҙер, Аллаға шөкөр, мәсет, мәҙрәсәләрҙә дини белем алыу өсөн ҙур мөмкинселектәр асылды. Бигерәк тә хәҙерге фетнә сығып киткән осорҙа мосолмандарға хаҡ, ата-бабаларыбыҙ тотҡан диндә, йәғни Ҡөрьән Кәримде һәм Пәйғәмбәребеҙҙең сөннәтен дөрөҫ өйрәтеү мөһим.



Шул маҡсаттан сығып, Сибай ҡалаһының “Тәҡүә” Йәмиғ мәсетендә йыл һайын яҡынтирә район, ауылдарҙан килгән муллалар өсөн уҡыуҙар ойоштороla. Был сараны башлап ебәреүҙә, үткәреүҙә “Тәҡүә” мәсетенең имам-хатибы Әғләметдин хәҙрәт Ғәзизовтың өлөшө бик ҙур. Ҡышҡы каникулдар ваҡытында башланған уҡыуҙар әле лә дауам итә. Белемдәрен арттырырға килеүселәрҙе Дауд исемле остаз бөтә күңелен һалып уҡыта. Имамдар күп кенә һорауҙарына яуап таба алдылар. Ҡолсора ауылынан Танһыҡкужин Хәлил ағай бында өсөнсө тапҡыр килгән: “Күп яңы нәмәләр белдем, бигерәк тә ғәҡидә мәсьәләһенә ҡағылған һорауҙарға яуап алдым, был минең өсөн бик мөһим, сөнки Ислам диненең нигеҙе - дөрөҫ иғтиҡад (ышану)”. Өфө ҡалаһының РИУ “Ғәлиә” мәҙрәсәһендә белем алыусы Марат исемле егет бында беренсегә килгән. Ул белем арттырыу менән бер рәттән имамдарға ғәрәп әлифбаһы, тәжүид буйынса дәрестәр бирә. Баймаҡ районының Һәмән, Ишбулды, Төркмән, Иҫке Сибай, Хәлил, Үҙән ауылдарынан, Ейәнсура районынан килгән уҡыусылар алыҫ ара тип тормағандар, ғаилә-доняларын ҡалдырып белем алыу ниәте менән йыйылғандар, уларға ПәЙғәмбәребеҙ һөйөнөс бирә: “Кем дини белем алыу, арттырыу юлына баҫһа, ул кешенең йәннәткә барасаҡ юлын Аллаһы Тәғәлә еңел ҡылыр” (Мүслим). Тағы бер хәҙистә әйтелеүенсә, белем алырға сыҡҡан кеше өйөнә ҡайтҡансы Аллаһы Тәғәләнең юлындалыр (Тирмизи).

Быйылғы уҡыуҙарҙың Рабиғүл әүүәл айына, йәғни һөйөклө Пәйғәмбәребеҙҙең донъяға тыуған айына тап килеүе осраҡлы түгелдер. Мөхәммәд пәйғәмбәр (с.ғ.с.) үҙе үк уны яратып, хөрмәт менән иҫкә төшөрөүсе, уға сәләм һәм салауат әйтеүсе мосолмандарҙы ҡеүәтләп, яҡлап торалыр кеүек!

Беҙҙе Пәйғәмбәребеҙҙең өммәтендә яратҡан Аллаһы Тәғәләгә был оло рәхмәт өсөн күпме генә шөкөр итһәк тә аҙ булыр ине, сөнки Мөхәммәд пәйғәмбәр Аллаһы Тәғәләнең иң яратҡан рәсүле, бөтә пәйғәмбәрҙәрҙең башлығы. Күп ислам ғалимдары салауат әйтеү уажиб тигән фекерҙә. Мәҫәлән, имам Мәлик: “Ғүмер буйына бер тапҡыр салауат әйтеү - уажиб, шунан артығы - мөстәхәбтер , - тине. Имам Шәфиғи ла был фекер менән килешә. Бөйөк имамыбыҙ Әбү Хәнифә “Намаҙҙа салауат әйтеү - сөннәттәр” тигән.

Ҡайһы бер мосолман-сектасылар Мәүлид үткәреүгә (унда сәләм, салауат әйтелә. пәйғәмбәребеҙҙең тормошо, гүзәл әхләге, сифаттары тураһында һөйләнелә, уны яратып мөнәжәттәр әйтелә) ҡаршы сығып, бындай сара ойоштороуҙы бидәғәт тип яу һалалар. Шул уҡ ваҡытта үҙҙәре үк секта башлыҡтарының тыуған көндәрен үткәреп маташалар, шуның менән Ҡиәмәт көнө фетнә сығарған башлыҡтарының шәфәғәтенә ирешмәк булаларҙыр.

Мосолман ҡәрҙәштәр, хаҡ юлдан барһаҡ, Ҡиәмәт көнөндә Пәйғәмбәребеҙ (ғ.с.) беҙҙең яҡлаусыбыҙ булыр, Иншаллаһ. Һүҙемде Аллаһы Тәғәләнең Ҡөрьән Кәримдә әйткән әмере менән тамамлайым: “Шикһеҙ, Аллаһы Тәғәлә һәм Уның фәрештәләре пәйғәмбәргә фатиха бирә. Эй һеҙ, иман килтереүселәр! Уға салауат әйтегеҙ һәм сәләмләп тыныслыҡ теләгеҙ!” (Әл-Әхзәб, 56) Әмин.

■ Ислам даирәһе

# ИСЛАМ ДИНЕНЕҢ СИХЫРСЫЛЫҠҠА, ЙОНДОҘНАМӘЛӘРГӘ ҠАРАШЫ

**Шамил АЛЯУТДИНОВ**
**мәҡәләләре буйынса**

Ғалимдарҙың күбеһе сихырсылыҡ барлығы менән килешә. Сихырҙың тәьҫирле була алыуына бер нисә аңлатма бар. Беренсенән, тормоштағы бар күренештәрҙе логика йә иһә физик ҡанундар аша аңлатып булмай. Икенсенән, Аллаһы Тәғәлә өсөн хатта мәғәнәһе булмаған һүҙбәйләнештәрҙе тәьҫирле яһау бер ҙә ҡыйын түгел. Өсөнсөнән, башҡа тыйылған ғәмәлдәр менән бер рәттән (кеше үлтереү, зина ҡылыу, араҡы эсеү һ.б.) сихырсылыҡ та кешенең асылын күрһәтеүсе критерий булып тора. Һәр кем үҙ юлын үҙе һайлай, шул уҡ ваҡытта Аллаға баштан алып кешенең ниндәй аҙымдар эшләйәсәге билгеле.

Сихырсылыҡ, күрәҙәселек - иң ҙур гонаһтарҙың береһе, быны менән шөғөлләнгәндәр йәшерен нәмәләрҙе белеүгә дәғүә ҡылалар, ә был көфөрлөк. “Күрәҙәселек итеүсе һәм күрәҙәсегә мөрәжәғәт итеүсе - беҙҙең арабыҙҙан (мосолман) түгел. Күрәҙәсегә барып, уның һүҙҙәренә ышанған кеше Мөхәммәд ғәләйһис-сәләмгә ингәндәргә (Ислам диненә) инанмаған була” кеүек хәҙистәрҙә Пәйғәмбәребеҙ беҙҙе сихырсыларға, күрәҙәселәргә һәм шуның ишеләргә мөрәжәғәт итеүҙән тыя. Шуныһы мөһим, сихыр үҙенән үҙе түгел, бары тик Аллар әмере менән генә тәьҫир итә, сөнки яҡшыны ла, яманды ла Аллаһы Тәғәлә генә барлыҡҡа килтерә. Аллаһтың көс, ҡеүәте иманы нык булғандарҙы һаҡлай. Сихырға юлыҡҡан кеше өсөн инде был бик ҙур һынау.

Пәйғәмбәребеҙҙән (ғ.с.) бер көн сихырсылар тураһында һорағандар. Уның яуабы: “Быға батибар итмәгеҙ”. “Әммә ҡайһы саҡ улар әйткәне дөрөҫ булып сыға”, - тип аптырайҙар кешеләр. Пәйғәмбәребеҙ: “Тормошҡа ашҡан һүҙҙәре - сихырсыға уның яҡын ен-шайтаны әйткән хаҡ һүҙ. Шул уҡ ваҡытта сихырсылар был бер бөртөк хаҡ һүҙгә йөҙләгән алдаҡ һүҙ ҡушалар”, - тигән яуап ҡайтара. Ендәр фәрештәләрҙең үҙ-ара һәйләшкәндәрен йәшерен тыңлап мәғлүмәт ала алалар. Сихырсылар үҙҙәре лә көслө психологтар: ендәр ярҙамында кешенең үткән ғүмере тураһында белеп, килгән кешене был йәки теге буласаҡ ваҡиғаларға йүнәлтәләр. Кешенең уйҙарында үҙе лә һиҙмәҫтән ошо йүнәлешялбарыныу хөкөм һөрә, һәм был Аллаһы Тәғәлә яғынан ҡабул ителеп үтәлеүе ихтимал. Шуға ла сихырсыларға, күрәҙәселәргә хатта барыу, мөрәжәғәт итеү ҙә ҡурҡыныс.

Йондоҙнамәләргә килгәндә, йондоҙҙарға ҡарап күрәҙәлек итеү, астрология - сихырсылыҡтың бер төрө. Йондоҙҙар нимә өсөн яратылған һуң, Яуап: “Ул - Ер һәм диңгеҙ ҡараңғылығында юл табыу өсөн һеҙгә йондоҙҙарҙы яратты. Беҙ аяттарҙы белгән кешеләр өсөн аңлаттыҡ” (Ҡөрьән Кәрим, 6:97), “Беҙ түбәнге Күкте яҡтыртҡыстар менән биҙәкләнек, Беҙ уларҙы шайтандарға атыр нәмә иттек, һәм уларға ут ғазабын әҙерләнек” (67:5).

Астрономия фәне менән шөғөлләнеү, Аллаһ бар иткән күк есемдәрен өйрәнеү, киреһенсә, маҡтарлыҡ эш. Шулай итеп, кеше үҙен юрау, фалдарҙың ҡоло итеп түгел, ә үҙ юлын үҙе һайлауы, ҡалған ғәмәлдәре өсөн яуап бирергә тейешле шәхес итеп күрә белеүе мөһим.

# ЭЧ ПОШУ

Эч пошу - эшсезлектән яки әйләнә-тирәң кызыксыз тоелганда була торган күңелсезлек, күңел, җан тынычсызлыгы, күңел төшенкелеге.

Сезнең белән күңелебездә мондый халәт булганда, безнең көндәлек тормышыбызда нинди үзгәрешләр башлануын искә төшереп карыйк әле, Бер рус әдибенең сүзләре бик күтәренке рухта яңгырый:

*Ачы кайгы кичермәүчегә,*
*Сугыш, үләт күрмәүчегә,*
*Параша исен иснәмәүчегә*
*Тормыш күңелсез тоела*
(Э.А.Борохов).

Мөэмин тормышында эч пошу нинди урын тота соң, Мөхәммәд пәйгамбәр (аңа Аллаһының рәхмәте һәм сәламе булсын): “Сез эч пошу, рухи интегү хисе белән “килешкәнчегә”, аңа ияргәнчегә кадәр, Аллаһының рәхмәтеннән һәм мәрхәвәтеннән мәхрүм булмаячаксыз , - дип әйткән. Ягъни, кеше күңеленә төшкән эч пошу, күңелсезлек сәбәпле тормышның теге яки бу өлкәсендә алга баруын туктатса, битарафлык һәм рухи таркалу халәтенә керсә, ул үзен иртәгәсе көндә күтәргә мөмкин булган мөмкинчелекләрне югалта башлый.

Ул туктап кала (үзенең һөнәри эшчәнлегендә; үз акылы һәм тәне өстендә эшләүдән туктый; балаларына тиешле игътибар бирми башлый, аларны тәрбияләүгә битараф карый, ул әйләнә-тирәдәгеләргә сабырлык турында һәм Аллаһ каршында дини гыйбадәтләрнең минимумын башкару кебек эшләрне эшләргә тиешлеген оныта, аның дөнья һәм ахирәт киләчәге үзгәрә, кайсыдыр этапка җиткәч җимерелә башлый). Ул әлеге рухи сынауны үтми һәм шуның белән үзен көткән нәрсәне кулланырга сәләтсез булуын күрсәтә.

Эч пошу һәм күңелсезлек биләп алган кеше үзенең “нинди бәхетсез” һәм “тормышы нинди авыр булуы” турында уйлый башлап, булган яхшы нәрсәләр турында оныта һәм шуның белән кешеләр һәм Аллаһ алдында яхшылыкның кадерен белмәүне күрсәтә, ә бу иртәгесе көндә яңа югалтуларга илтә. Ә икенче берәү, матди һәм башка мөмкинчелекләре булса, газаплый торган тойгылардан арыну өчен үзен гөнаһлар белән (хәмер, төнге клублар һәм гадәттәгечә сәгатьләр буе телевизор каршында утыру белән) ләззәтләндерә һәм иң түбән дәрәҗәгә төшә, Аллаһыдан тагы да читләшә.

Күпмедер вакыттан соң, дөньялыкта булмаса да, аң күзләрен мәңгелек каршында ачып, ул аңына килергә мөмкин, ләкин ул вакытта бу кеше шулкадәр түбән төшкән һәм юлдан язган булачак, хәтта аның яңадан аякка басу мөмкинлеге дә бик аз булачак.

Кеше исән икән, мондый мөмкинлек бар, әлбәттә. “Ялкау” хәрәкәтсезлектән сазлыкка әйләнгән сулыкның тиз генә сакф сулы елгага әверелә алмавын онытмаска кирәк.

Тормыш - эч пошуга да, күңелсезлеккә дә карамыйча, туры, эзлекле, уйчан һәм төпле фикер белән барырга кирәк булган юл.

Алга таба хәрәкәт итеп, без тормышта булган башка начар нәрсәләр кебек үк, боларны да узып китәбез, үзебезгә яхшы чакта гына түгел, начар булып тоелганда да иманлы булуыбызны күрсәтәбез.

